## Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың телмәре үҫешенә йомаҡтарҙың йоғонтоһо

Йомаҡтар—халыҡ ижадының иң боронғо жанрҙарының береһе. Йомаҡтар кешеләрҙең, айырыуса балаларҙың, тапҡырлығын һынау һәм зирәклеген үҫтереү сараһы булараҡ ҡулланыла. Йомаҡтар айырым предметтың билдәһен икенсе бер предметҡа, күренешкә күсереү нигеҙендә барлыҡҡа килгән. Шуға күрә улар тормоштағы конкрет предметтар, күренештәр менән бәйләнгән. «Йомаҡ» атамаһы йомоу һүҙенән килеп сыҡҡан, йәғни йомаҡ - ул уйҙы йомоп, йәшереп әйткән фекер. Йомаҡтар беҙҙең боронғо һәм изге таныштар. Уларҙы беҙ уҡыу менән сисә башлайбыҙ, тиҙәйткестәр, йә булмаһа һынашмаҡтар менән бутамайбыҙ.

### Балаларҙы йомаҡ төҙөүгә өйрәтеү алымдары

Мәктәпкәсә йәштәге осорҙа йомаҡтар менән эш уны сисеүгә ҡайтып ҡала. Шулай ҙа методика балаларҙы бирелгән объекттарҙы асыҡлай алһындар өсөн конкрет рекомендациялар ҙа бирмәй.

Балаларҙы күҙәтеүҙәрҙән күренеүенсә, зиһенле балалар төрлө варианттарҙы ҡарап үҙҙәре яуап табыусан. Шул уҡ ваҡытта төркөмдөң күпселек өлөшө пассив күҙәтеп ултырыусы булып ҡала. Тәрбиәсе эксперт ролендә сығыш яһай. Зиһенле баланың яуабын башҡалар бик тиҙ иҫендә ҡалдыра. Педагог бер ни тиклем ваҡыт үткәс шул уҡ йомаҡты әйтһә, балаларҙың күпселеге яуапты ҡабатлап әйтә. Баланың аҡыл ҡеүәһен арттырғанда уны йомаҡ уйлап табырға өйрәтеү ҙә зарур.

А.А.Нестеренко мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн йомаҡтар уйлап сығарыу моделен тапкан. Адаптацияланған вариантта был технология балаларҙы йомаҡ уйлап сығарырға ярҙам итә. Уны уйлағанда баланың башы нык эшләй, уларҙан хатта бала үҙе ҡыуаныс кисерә.

Балаларҙы йомаҡ уйлап сығарырға өйрәтеү 3,5 йәштәр тирәһендә башлана. Практикала балалар баҡсаларында йомаҡ төҙөүҙең өс моделе ҡулланыла. Өйрәтеү түбәндәгесә барырға тейеш:

Тәрбиәсе йомаҡ төҙөү моделе таблицаһын таҡтаға элә һәм балаларға ниндәй ҙә булһа объект тураһында йомаҡ уйлап сығарырға кәрәклеген әйтә.

**<u>Модель 1</u>** ***(ҡушымта 1)***

| Ниндәй? | Тағы нимә шулай була ала? |
|---|---|
| | |
| | |
| | |

Йомаҡ уйлап сығарыу өсөн объект (самауыр) һайлап алына. Артабан тәрбиәсе биргән билдәләр буйынса балалар образлы характеристика бирә.

--Самауыр ниндәй төҫтә? –Ялтыр

Тәрбиәсе был һүҙҙе таблицаның һул яғындаҫы беренсе юлына яҙып ҡуя.

--Самауыр нисек ҡайнай? –Шыжлап (таблицаның һул яғының икенсе юлы тултырыла).

--Унын формаһы ниндәй? --йомро ( таблицаның һул яғының өсөнсө юлына яҙыла).

Тәрбиәсе балаларҙы һанап киткән билдәләр буйынса сағыштырып, таблицаның уң яғындағы юлдарҙы тултырырға саҡыра:

| Ниндәй? | Тағы нимә шулай була ала? |
|---|---|
| Ялтыр | тәңкә |
| Шыжлай | вулкан |
| Йомро | ҡарбуз |

Балаларҙан сағыштырыу өсөн алынған объекттарға образлы характеристика биреүҙе һорайҙар (таблицаның уң яғы).

Мәҫәлән: ялтыр—тәңкә, әммә ябай түгел, ә таҙартылған, ялтыратылған тәңкә.

Таблица түбәндәгесә булыуы ихтимал:

| Ниндәй? | Нимә шулай була ала? |
|---|---|
| Ялтыр | Ялтыратылған тәңкә |
| Шыжлай | Уянған вулкан |
| Йомро | Бешкән ҡарбуз |

Таблицаны тултырып бөткәс тәрбиәсе йомаҡтарҙы уң һәм һул яктағы юлдарҙы ҡушып, улар араһына "нисек" һәм "әммә улай түгел" тигән һүҙҙәрҙе ҡуйып уҡырға ҡуша.

Йомаҡты күмәкләп тә , айырым бер баланан уҡытырға ла мөмкин .

Килеп сыҡҡан тексты балалар бер нисә тапҡыр ҡабатлай.

Йомғаҡлау өсөн самауыр тураһында йомаҡ әйтелә: "Таҙартылған тәңкә кеүек ялтыр, яңы уянған вулкан кеүек шыжлай, әммә бешкән ҡарбуз түгел".

Рекомендациялар: таблицаның һул яғындағы билдәләрҙе бер һүҙ менән атап, унын беренсе хәрефен ҡалынайтып яҙыу, ә уң якта объектты һүрәтләү яҡшы. Был баланың иҫен нығыта: бала, укый белмәһә лә, беренсе хәрефте иҫендә ҡалдыра һәм һүҙҙе тулыһынса әйтә.

"Ниндәй—Нимә шулай уҡ була ала?" моделен үҙләштергәндән һуң балаларҙы сағыштырыу менән таныштырыу зарур. Йомаҡтарҙы объекттарҙың билдәләрен аҙһытып та күрһәтергә мөмкин ( самауыр таҙартылмаған ботинка кеүек баҙыҡ) йәки киреһенсә, арттырыу (самауыр, ялтыратылған тәңкә кеүек яп-ялтыр).

**<u>Модель 2</u> *(ҡушымта 2)***

2 модель менән эшләү методикаһы беренсе моделгә оҡшаш.

Балалар алдындағы таҡтаға яйлап тултырыла барған таблица эленә ( унын башта һул, аҙаҡ уң яғы тултырыла).

| Нимә эшләй? | Нимә *(кем)* тағы шулайта? |
|---|---|
| | |
| | |
| | |

5 йәшлек балалар менән терпе тураһындағы йомаҡ төҙөү.

- Терпе нимә эшләй?
- пырхылдай, йыя, йыбырлап атлай.
- Кем йәки нимә һымаҡ пырхылдай?
- Яңы паровоз кеүек пырхылдай *(арттырып сағыштырыу).*
- Иҫке сәйнүк кеүек пырхылдай *(аҙһытып сағыштырыу).*
- Яҡшы хужабикә кеүек йыя *(ҙурлап сағыштырыу).*
- Һаран кеш кеүек йыя *(аҙһытып сағыштырыу).*
- Яңы атларға өйрәнеп йөрөгән бала кеүек йыбырлап атлай *(арттырып сағыштырыу).*
- Ҡарт бабай кеүек йыбырлап атлай *(аҙһытып сағыштырыу).*

Артабан тәрбиәсе “нисек”, “әммә улай түгел” бәйләүестәрен ҡушып дөйөм йомаҡ төҙөргә саҡыра.

Мәҫәлән: арттырыуҙы ҡулланып терпе тураһында йомаҡ төҙөү. “Яңы паровоз кеүек пырхылдай; яҡшы хужабикә кеүек йыя; йыбырлап атлай, әммә атлап-ҡолап йөрөгән бала кеүек түгел”.

| Нимә эшләй? | Нимә *(кем)* шулай уҡ эшләй? |
|---|---|
| Пырхылдай | Яңы паровоз |
| Йыя | Яҡшы хужабикә |
| Йыбырлап атлай | Атлап-ҡолап йөрөгән бала |

Мәҫәлән:

Терпе тураһында аҙһытыу алымы ҡулланып йомаҡ төҙөү “ Пырхылдай, әммә боҙолған сәйнүк түгел; йыя, әммә һаран түгел; ҡарт гном кеүек йыбырлап атлай”.

| Нимә эшләй? | Нимә *(кем)* шулай уҡ итә? |
|---|---|
| Пырхылдай | Боҙоҡ сәйнүк |
| Йыя | Һаран |
| Йыбырлап атлай | Ҡарт гном |

**Модель 3** ***(ҡушымта 3)***

Был моделдең үҙенсәлеге шунда, бала бер объект менән икенсеһен сағыштырғанда улар араһындағы оҡшашлыкты һәм айырманы атай.

| Нимәгә оҡшаған? | Нимә менән айырыла? |
|---|---|
| | |
| | |

Бәшмәк тураһында йомаҡ төҙөү юлы:

- Бәшмәк нимәгә оҡшаған? – Бабайға оҡшаған.
- Бабайҙан нимәһе менән айырыла? – Бәшмәктең һаҡалы юҡ .
- Тағы нимәгә оҡшаған? – Йортҡа, әммә тәҙрәһе юҡ.

Артабан тәрбиәсе "нисек" йәки “шуға оҡшаған”, "шуға оҡшаған" йәки “әммә унһыҙ” һүҙҙәрен ҡулланып дөйөм йомаҡ төҙөргә саҡыра.

| Нимәгә оҡшаған? | Нимәһе менән айырыла? |
|---|---|
| Бабай | Һаҡалы юҡ |
| Йорт | Тәҙрәһе юҡ |

Килеп сыҡҡан йомаҡтың тексы: «Бабайға оҡшаған, әммә һаҡалы юҡ; йортҡа оҡшаған, әммә тәҙрәһе юҡ;».

Йомаҡтарҙың роле бик ҙур. Улар балаларҙың телмәр үҫешенә ныҡ йоғонто яһай, уларҙың һүҙ запасын арттыра, фекерләү ҡеүәһен байыта, тирә-яҡ мөхит тураһында белем өҫтәй, эстетик тойғолар тәрбиәләй, ғөмүмән баланың үҫешен камиллаштыра.